■ Сәләмәтлек

# ИСЛАМДА ТЕШ ТАҘАРТЫУ

Бухариҙың китабында бер хәҙис миҫал итеп килтерелә. Аллаһы Тәғәләнең рәсүле (с.ғ.с.) шулай тип әйткән: "Әгәр ҙә өммәтемә нык ауырлык һалыуҙан ҡурҡмаған булһам, уларға һәр намаҙ алдынан тештәрен таҙартырға ҡушыр инем (көнөнә биш тапҡырҙан да кәм түгел)".

Ошо уҡ йыйынтыкта әйтелә: "Теш таҙартыу - ауыҙҙың таҙалығы һәм Раббының ризалығы (асылы)".

Әхмәдтең китабында Аллаһы Тәғәләнең рәсүле(с.ғ.с.) шулай тип белдерҙе, тип әйтелә: "Тамаҡ ашағандан һуң ауыҙын таҙартҡан кеше ҙур яҡшылыҡ эшләй, сөнки фәрештәләр өсөн (әҙәм балаһы ауыҙындағы) аҙыҡ ҡалдығынан да ауырыраҡ нәмә юҡ!".

Әхмәдтең китабында йәнә шулай тиелә, Аллаһы Тәғәләнең рәсүле (с.ғ.с.) әйткән: "Өммәтем быны тота алмаҫ тип ҡурҡмаһам, мин һәр намаҙ алдынан уларға сиуаҡ менән файҙаланырға ҡушыр инем".

Сиуаҡ арак тигән ағастың (sәlvәdora persica) тамырынан йәки ботағынан яһала. Уны мисуаҡ тип тә йөрөтәләр. Араҡтың бер осо тетелә, уны теш таҙартыу өсөн ҡулланалар.

Хузайфа шулай тигән: "Аллаһы Тәғәләнең рәсүле (с.ғ.с.) төнгө намаҙға уянған саҡта тешен сиуаҡ менән таҙарта торғайны". Әл-Бухари әйтеүенсә, Рәсүл (с.ғ.с.) шулай тигән: "Сиуаҡ ауыҙҙы таҙарта, бынан тыш, ул Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында хәйерле".

Мөслим бер хәҙистә тапшыра: "Рәсүл (с.ғ.с.) өйөнән сығыр алдынан һәр ваҡыт башта сиуаҡ менән тешен таҙартыр ине".

Сиуаҡ тураһында башҡа төрлө хәҙистәр ҙә бар. Иң яҡшы сиуаҡ арак тигән ағастар яһала. Уны ҡулға эләккән теләһә бер ағас ботағынан яһарға ярамай, ҡайһы бер ағастарҙа зарарлы матдәләр була. Сиуаҡ менән дә белеп таҙартырға кәрәк, артыҡ "тырышлыҡ" һалынһа, тештең эмале боҙолоуы ихтимал. Самалап ҡулланғанда ул теште, телде таҙарта, теш ташынан, өң барлыҡҡа килеүҙән һаҡлай, ҡаҙналарҙы нығыта, күҙ күреүен, һөйләшеү һәләтен яҡшырта, йоҡомһорауҙы бөтөрә, аш эшкәртеүгә булыша, зиһенде нығыта. Сиуакты рауза һыуында тотоп алыу яҡшы. Уны шулай уҡ урман сәтләүеге ағасынан да яһайҙар.

Сиуаҡты ҡасан ҡулланһаң да ярай: намаҙ алдынан да, тәһәрәт алырҙан элек тә, иртәнсәк уянғас та. Ураҙа тотҡандарға ла шулай уҡ сиуаҡ менән теш таҙартыу ҡушыла.

■ Исламға ҡайтыу

# НАМАҘҘЫҢ КӨСӨН ТОЙҘОМ



"Һәр бала фитрәлә (саф килеш) тыуа, һуңынан уны атаәсәһе йә йәһүд, йә насрани, йә мөшрик яһай" (Әл-Бухариҙан).

Танылған киноактер Лиам Нисон сығышы менән Ирландиянан. Ул Сәләхетдин тураһындағы "Күк Батшалығы" тигән фильмда төп ролдәрҙең береһен уйнағайны. Ошо ролде башҡарғандан һуң, актер Ислам динен ҡабул итәсәген белдерҙе.

Истамбул Нисонға нык тәьҫир итә, айырыуса уны аҙан тауышы тетрәндерә. Дөрөҫ, башта биш тапҡыр яңыраған аҙанды ғәжәп күрә, һуңынан инде был моңло тауыш көндән-көн йөрәгенә нығыраҡ үтеп инә бара. Донъяла аҙандан да гүзәл тауыш юҡ һымаҡ тойола башлай. Истамбулда дүрт мендән ашыу мәсет бар, уларҙың бөйөклөгөнә һәм гүзәллегенә һоҡланған актер мосолман дине тураһында уйлана башлай ҙа инде. "Төркиәлә намаҙ тураһында ролик ҡарағайным, шундуҡ уның көсөн тойҙом. Намаҙ миңә шул тиклем нык тәьҫир итте", тип һөйләй Нисон.

Лиам Нисон Төньяҡ Ирландияның Бэллимен ҡалаһында тыуып үҫкән, ул ирландтарға хас булғанса, ысын католик ғаиләһендә тәрбиә ала. Лиам тигән исемде лә уға католик священнигы хөрмәтенә ҡушалар, ә бәләкәй сағында буласаҡ актер сиркәүҙә насрани йолаларын атҡарыуҙа ярҙам итешеп йөрөй. Ләкин тормош тәҙәтмәләр индерә һәм Лиам был диндең ҡиммәттәренә шикләнеү менән ҡарай башлай. Хатта уның ҡайһы бер фекерҙәре насрани сиркәүҙәренең ризаһыҙлыгын да тыуҙыра.

Нисон насрани һәм мосолман диненә ҡағылған әҙәбиәтте генә түгел, ә, ғөмүмән, диндәрҙә тәнкитләгән әҙәбиәтте лә күп өйрәнә. Актерҙың белдереүенсә, шуға ла диндәргә ҡарата уның үҙ ҡарашын булдырырға бөтөн форсаты ла була.

"Тәүгә аҙнала биш тапҡыр намаҙ уҡыуы ауыр булды, шунан йылап ҡына намаҙҙың күңелемә йылы йоғонтоһон тойҙом, был мине ғәжәп итте, ҡыуаныс кисерҙем", тип һөйләй Нисон Исламдағы тәүге аҙымдары тураһында.

Лиам Нисон - Британ империяһының ордены кавалеры, "Шиндлер исемлеге", "Әсирә", "Тау башындағы өйҙәге шәүлә", "Йондоҙ һуғыштары", "Нью-Йорк бандаһы", "Күк батшалығы", "Нарния хроникаһы", "Бэтмен: иң башы", "Ысын һөйөү" һ.б. фильмдарҙа уйнаны.

■ Фәһем



# Шатлыҡ сере

Бер аҡһаҡал шатлығынан һөрән һалды,
Ә дуҫы уға ҡат-ҡат рәхмәтен әйтте.
Аптыраны был хәлгә бер үткенсе,
Сәйерлектең сәбәбен белмәк итте.
Яуап итеп, ҡарттар көлдө ҡысҡырып.
Үткенсе уйланды йәлләп ҡарттарҙы:
"Шөрөптәре" лә күптән бушағандыр,
Нишләтәһең хәҙер диуаналарҙы...
Ә ҡарттар тап шул мәлдә күргән ине
Күктә яңы йондоҙ ҡабынғанын.
Аҡыл эйәләренең күңелдәре,
Ҡараштары юғарыға ҡ үкталғайны.
Халыҡтың күңдәҙ йондоҙ күрмәгәнен
Хәтерҙәренән улар сығарғайны...

# Хикмәт эйәһе

Бер егет Хикмәт эйәһенә килә:

- Минең дә хикмәт эйәһе булғым килә. Аҡыл бир, бының өсөн мин нимә эшләргә тейешмен? - тип һорай.

Хикмәт эйәһе уға бер нәмә лә тип әйтмәй. Шулай ҙа егет бер нисә көн тегенең артынан ҡалмай эйәреп йөрөй. Бер мәл аҡһаҡал бармағы менән ымлап уны үҙ янына саҡыра ла, йылға буйына алып китә. Тәрән генә урынға индергәс, тегенең инбашынан нык итеп тотоп ала ла, һыу эсенә тыға. Егет сәбәләнһә лә, шулай тотоп тора бирә. Кире һыуҙан сығарғас, һәм егеткә әҙерәк хәл ингәндән булғас, шулай тип һорай:

- Улым, башың һыу эсендә булғанда нимәне нык теләнең?

- Һауа, тик һауа ғына! Һыу төбөндә бөтән бер нәмә лә кәрәкмәй! - тигән егет ҡәтғи рәүештә.

- Бәлки, шул мәлдә байлыҡ, даншөһрәт, донъя рәхәтлеге тураһындағы уйҙар башыңа килгәндер? Бәлки ҡыҙға ғашиҡ булыу тураһында хыялланғанһыңдыр?

- Юҡ, хәҙрәт, тик һауа тураһында ғына уйланым!

- Быны шулай, - тигән уға аҡыл эйәһе. - Хикмәтле булыр өсөн, Аллаһҡа ынтылыуың һауаны теләгән шикелле уҡ көслө булырға тейеш. Һин тормоштағы бөтән маҡсаттарҙан баш тартып, Аллаһы Тәғәләне эҙләргә тейешһең. Шундай ярһыулыҡ һәм ашҡыныу менән ынтылһаң, улым, бер һуҙһеҙ, һин хикмәт эйәһе булып китәсәкһең.

# КӨН ХӘҘИСЕ

Пәйғәмбәребеҙ әйткән: "Ниндәй ҙә булһа берәй кеше ғилем алыр өсөн юлға сыҡһа, Аллаһы Тәғәлә уның Йәннәткә барыу юлын да еңеләйтә, һәм шул хаҡ, фәрештәләр, белем эҙләүсенең эшенән риза булып, үҙҙәренең шатлығын белдереп, уның өҫтөндә мотлаҡ ҡанаттарын йәйеп тороrҙар, һәм шул хаҡ, ғаләмдәге һәм ерҙәге бар мәхлүктәр, хатта балыҡтар ҙа, белем эстәүсене ярлыҡауҙы һораясаҡтар. Ғилем эйәһенең сәждә итеүсенән өҫтөнлөгө айҙың күк яҡтыртҡыстарынан өҫтөнлөгөнә бәрәбәр, һәм шул хаҡ, ғилем эйәләре - пәйғәмбәрҙәрҙең варисҭары, пәйғәмбәрҙәр иһә мираҫҡа динар ҙа, дирһәм дә ҡалдырмай, улар мираҫҡа ғилем генә ҡалдыра һәм уны үҙләштергән кеше оло бәхеткә эйә". (Әбү Дауд; ат-Тирмизи).

# Тәрән фекер

Дени ДИДРО,
*француз яҙыусыһы, фәйләсуф*

Ата-әсәләр балаларын борсоулы һәм түбәнселекле һөйөү менән ярата, бындай һөйөү баланы боҙа ғына. Ләкин бөтән төрлө һөйөү ҙә бар, уларҙы ғәҙел, намыҫлы иткән иғтибарлы һәм тыныс һөйөү. Атайҙың ысын һөйөүе бына шулай була.



# Миғраж кисе

Ғалимдарҙың иҫәпләп сығарыуынса, был төн 621 йылдың 27 Рәжәбендә була һәм унда Изге Ҡөрьән Кәримдә асылған мөғжизә билдәләп үтелә: "Үҙ ҡолон төндә "Хәрәм мәсеттән" аяттарыбыҙҙы күрһәтеү өсөн тирә-яғын бәрәкәтле иткән "Йыраҡ мәсеткә" күсергән Затҡа дан! Ул, ысынлап та, күреүсе, ишетеүсе!" ("Әл-Исра", "Төндә күсереү" сүрәһенең 1-се аяты).

Риүәйәттәргә ҡарағанда, Аллаһы Тәғәлә Үҙенең Рәсүлен Мәккәнән Әл-Ҡоддуска (Иерусалимға) күсергән, уны ете күк көмбәҙе аша үткәреп Үҙ тәхете янына күтәргән.

Ҡөрьән-Кәримдең 94-се сүрәһен тәфсирләүселәр, әлеге Күккә күтәрелгән Рәсүл Әкрәмдең йөрәге күкрәгенән алынған һәм фәрештәләр тарафынан ҡойондоролған, тип тә аңлата. Уның ауырлыҡтарҙан арыныуы һәм үҙенең бойороусыһы булған Аллаһы Тәғәләгә тырышыбыраҡ хеҙмәт итергә әҙерләнеүе шулай бойомға ашҡан. Артабанғы тәфсир һәм аңлатмалар был ваҡиғаларҙы ентекләберәк тасуирлап, өҫтәп тә ебәрә: Ябраил фәрештәнең Мөхәммәдкә (с.ғ.с.) ярҙам итеүе, пәйғәмбәрҙең Бураҡ тигән атка атланыуы һәм уның күктә үҙенән алда булып киткән пәйғәмбәрҙәр менән күрешеүе, Аллаһы Тәғәлә менән һөйләшеүе һәм мосолмандар өсөн мотлаҡ булған биш ваҡыт көндәлек намаҙҙың шул төндә ҡанунлаштырылыуы.

Миғраж кисендә мосолмандар доға ҡылып, Ҡөрьән уҡып, Мөхәммәд пәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) ҡиссаһын өйрәнеп, уға мәдхиә әйтеп, бер-береһенә ошо мөғжизәгә арналған китаптар, риүәйәттәр һөйләп үткәрә.

